*Ишбулды ҒӘБДИНОВ*

Беҙҙең Кәрим һәм уға күрше ауылдар урынлашҡан ерҙәрҙә, ғөмүмән, Урал тауының көнсығыш далаларында, элек-электән, тарихсылар әйтеүенсә, табын башҡорттары йәшәгән. Улар, көнсығыш табын ҡәбиләһе, дүрт ырыуҙан тора: ҡара табын, барын табын, тиләү табын, күбәләк табын.

Монгол-татар яуы башланыр алдынан табындар Ҡыпсаҡ империяһының эсендә була һәм үҙе бер дәүләт булып һанала.

Ҡара табындар иһә табын ҡәбиләһенән айырылып сыҡҡан бер йәш табын була (XIII-XIV быуаттар тирәһе). Былар, ғөмүмән, Миәс, Уй йылғалары



янында туплана. Үҙҙәренең сығыштарын улар Майҡы бей менән бәйләй. Майҡы бей биләгән ерҙең бер өлөшө Ҡара табын исемен йөрөткән. XIV быуатта ҡара табындар Миндәк, Миәс йылғалары буйҙарын ҡалдырып, Кама буйына күсеп китә. Унда Ҡазан ханына буйһоноп, яһаҡ түләп йәшәйҙәр. Ләкин XVI быуат башында Ҡазан хандарының ҡыҫыуына түҙә алмай, ҡара табындар, барындар, тамъяндар, күбәләктәр һәм тиләүҙәр Көнъяҡ Уралға, үҙҙәренең ерҙәренә кире ҡайта.

Тарихсылар табын ҡәбиләһенә характеристика биргәндә, уның төрки ҡағанатын нигеҙләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләйҙәр. Ләкин эленән-эле тыуып торған һуғыштар табындарҙы өйрәнгән ерҙәренән ҡуҙғата һәм улар IX-X быуаттарҙа Ҡимаҡ ҡағанатының ҡул аҫтында йәшәргә мәжбүр була. Бында табындар ҡыпсаҡтар менән уртаҡ тел таба. Ҡыпсаҡтар, үҙҙәренең ханлығын ойоштороп, Ҡимаҡ ҡағанатының ҡул аҫтынан сығыуға өлгәшә һәм көнбайышҡа юл тота. Табындар иһә ҡыпсаҡтарҙан бушаған ерҙәргә хужа булып ҡала. Бынан һуң табындар көсәйә һәм үҙҙәре өсөн ҙур ғына ер яулай. Ерҙәре Алтайҙан Уралға тиклем һуҙыла. Бында улар үҙҙәренең Табын илен ойошторалар.

Был ерҙәрҙә улар күсмә тормоштан ярым күсмә тормошҡа күсә башлай, йәғни ҡыш көнө ауылда йәшәй, йәйен йәйләүҙәргә сыға. Был дәүерҙә улар малсылыҡ менән көн күрә. Малсылыҡта йылҡысылыҡ өҫтөн торған. Бынан тыш, башҡорттар һунарсылыҡ, ба-



09-2001.p65 162 29.08.01, 12:50
Black

лыҡ тотоу, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән. Ризыҡтары ит, балыҡ, төрлө емеш-еләк, бал булған. Биш кешелек ғаилә кәмендә 25 баш йылҡы малы тотҡан. Шуның өсөн беҙҙең ата-бабаларыбыҙға иркенлек, көтөүлек итеп файҙаланырға күп, киң ер кәрәк булған.

Рәсәй батшаһы көнсығыш халыҡтарҙы үҙенә буйһондора башлағас, Урал тауының көнсығышында йәшәгән табындар Рус подданствоһына инеүҙән баш тарта һәм Күсем ханға тоғролоҡ һаҡлап, рус агрессияһына ҡаршы (1598—1608 йылдарҙа) көрәшә.

Ҡара табын ырыуы үҙ заманында айырым бер ойошҡанлығы менән айырылған ырыу булып һаналған. Урал аръяғы яландарын Рус хөкүмәте «вотчинные земли» (йәғни, батшаның ере) тип иғлан итә һәм һәр ғаиләгә ер бирә. Был ер өсөн уны алған кеше батша хөкүмәтенә яһаҡ түләй. Ҡара табындар ҙа, батшаға яһаҡ түләп, үҙ иректәренә йәшәй. Ләкин һуңынан бындағы башҡорттарҙы, мишәр, типтәрҙәрҙе урыҫтар етәкселегендә батша файҙаһына эшләтә башлағандар. Бында йәшәгән башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһына рус иленең сиге урынлаштырылған. Башҡорттар ҡаҙаҡ еренә, ҡаҙаҡтар башҡорт еренә сыға алмай. Был сикте һаҡлау өсөн улар ҡәлғәләр төҙөүҙе башлай. Ҡара табындар йәшәгән ерҙәрҙә Миәс, Сыбаркүл, Силәбе, Эткүл, Этле ҡарағай, Үрге Яйыҡ ҡәлғәләре һалына. Башҡорт халҡының ризаһыҙлығы көсәйә, улар былдай хәлгә түҙмәй, батша хөкүмәтенә ҡаршы сығыш яһай башлай. Башҡорт ихтилалдары күп йылдар буйына һуҙыла. Бындай сығыштар батша тарафынан ҡанға батырылып баҫтырыла. Меңәрләгән башҡорт ғаиләләре бөгөн беҙ күреп йөрөгән сигандар һымаҡ үҙҙәрен ҡайҙа алып барырға белмәйенсә, башҡа ырыуҙар менән буталышып бөтә.

Бәлки, шул сәбәп менәндер, ҡайһы ҡәбилә ҡасан, ҡайҙа урынлашып көн күргәне тураһында ғалимдар бер фекерҙә түгел. Быға бер генә миҫал килтерәм. Хәҙерге Учалы районындағы Кәрим ауылы тураһында мәғлүмәт эҙләргә тотонһаң, бындағы халыҡты берәүҙәр ҡара табын ҡәбиләһенә индерә, икенселәр барын табын ҡәбиләһе ти. Минең шунда уҡ йәшәгән ҡайһы бер нәҫелдәрҙе, мәҫәлән, Йәшелбаевтарҙы, ҡыуаҡандар тип ишеткәнем бар. Минең белеүемсә, Туңғатар, Ҡартмуйнаҡ, Ҡорама ауылдары ҡара табындар. Тарихсы Әлим Зариповтың иҫәпләүенсә иһә, Ҡорама, Ҡартмуйнаҡ, Туңғатар, Ҡужай, Малаймуйнаҡ барын табындарҙан сыҡҡан. Мулдаҡай, Һөләймән, Мулдаш, Көсөк, Һөйөндөк ауылдарын да ҡайһы бер ғалимдар барын табын ҡәбиләһенә индерә.

1859 йылғы сказ исемлегендә Кәрим ауылы барын табынға индерелгән. Ҡайһы ҡәбилә булһа ла, Кәрим ауылында борон-борондан башҡорт халҡы йәшәгән.

1798 йылғы батша указы буйынса башҡорт иле 11 кантонға бүленә. Беҙҙең ата-бабалар йәшәгән ер 4-се кантон тип йөрөтөлә, ә 1832 йылда 4-се Таң аръяғы кантоны тип аталып китә. Бындағы ауылдар Үрге Урал һәм Троицк өйәҙҙәренә индерелә. Шул иҫәптән 1859 йылдың яҙыуҙары буйынса Троицк өйәҙенең Туңғатар волосы ауылдарының исемлеге бирелә. Ауылдар бер нисә төркөмгә бүленгән. Бына ул ауылдар һәм унда йәшәгән халыҡтарҙың һаны.

| **1-се йорт** | **Ирҙәр һаны** | **Ҡатын-ҡыҙҙар һаны** |
|---|---|---|
| 1. Туңғатар | 378 | 339 |
| 2. Ҡартмуйнаҡ | 229 | 239 |
| 3. Түләк | 136 | 116 |
| 4. Ҡорама | 222 | 229 |
| 5. Балбыҡ | 181 | 176 |
| | 1146 | 1099 |
| **2-се йорт** | | |
| 1. Кәрим | 319 | 313 |
| 2. Илсеғол | 70 | 81 |
| 3. Мулдаҡай | 144 | 143 |
| 4. Һөләймән | | |
| 5. Мулдаш | 299 | 284 |
| 6. Һөйөндөк | 139 | 154 |
| 7. Көсөк | 100 | 102 |
| | 1071 | 1077 |
| **8-се йорт** | | |
| 1. Яңымуйнаҡ | 124 | 96 |
| 2. Байһаҡал | 84 | 75 |
| 3. Ҡотоҡ | 31 | 42 |
| | 239 | 213 |
| **3-сө йорт** | | |
| 1. Малай-муйнаҡ | | |
| 2. Бурангол | 175 | 179 |
| 3. Абҙаҡ | 108 | 107 |



09-2001.p65 163 29.08.01, 12:50
Black

| | | |
|---|---|---|
| 4. Әбсәләм | 104 | 88 |
| 5. Тәтлембәт | 87 | 67 |
| 6. Һәйтембәт | 67 | 68 |
| 7. Ҡужай | 130 | 104 |
| 8. Әүеш | 158 | 116 |
| 9. Ялсығол | 93 | 106 |
| 10. Байрамғол | 154 | 146 |
| | 1076 | 981 |

**Өйәҙҙә йәшәгән кешеләр сословиелары**

| | Троицк өйәҙе | Үрге Урал өйәҙе |
|---|---|---|
| Чиновниктар | 238 | 479 |
| Отставкала булған чиновниктар һәм рядовой казактар | 1287 | 4071 |
| Рядовойҙар | 2365 | 3797 |
| Балалар | 3525 | 7697 |
| Муллалар | 114 | 191 |
| Бөтәһе | 7529 | 16235 |

Был исемлектә ҡатын-ҡыҙҙар һаны юҡ, полк иҫәбенә ирҙәр генә ингән, ә бер полкта 555 кеше булған. Уларҙың 500-е рядовойҙар, ҡалғандары начальниктар һәм ат ҡараусылар.

Шулай итеп, юғарыла күрһәтелгәнсә, һәр йорттоң бер полк бирерлек мөкинселеге булған. Шуның өсөн дә йорттарҙа, шул иҫәптән ауылдарҙа ла, полк штатында булған етәкселәрҙе күрәбеҙ.

Бер полкта булған начальниктар, йәғни командирҙар:

полк командиры — 1 кеше, уны губернатор тәғәйенләй;

полк старшинаһы — 1 кеше, бай казактарҙан булған етәксе, ул пехотала званиеһы буйынса майорға тиң;

полк есаулдары — 5 кеше. Был офицерҙар пехотала званиеһы буйынса капитанға тиң;

йөҙләләр (сотниктар) — 6 кеше. 100 казакка командалыҡ итә, пехотала поручикка тиңләнә;

полктың хорунжийы — 1 кеше — пехотала подпоручикка, корнетҡа тиңләнә;

урядниктар — ололары — 5 кеше, кеселәре — 15 кеше;

мулла — 1 кеше;

баш писарь — 1 кеше;

ярҙамсы писарҙар — 2 кеше;

полк коновалы (ветврач) — 1 кеше;

фуражсылар (ат ҡараусылар, ылаусылар) — 11 кеше;

ябай казактар — 500 кеше.

1859 йылда Кәрим ауылында Мөхәмәтша Бүләков зауряд-есаул булған (чинһыҙ есаул).

Хорунжийҙар (казак ғәскәрҙәрендә кесе офицер чины):

1. Мөхәмәтша Рәшев;
2. Фәйзулла Бүләков;
3. Фазлетдин Бүләков;
4. Хәбетдин Тунсев;
5. Мөхәмәтғәли Бутусов;
6. Шәфи Урусов.

Сотник:

Абдулнәфис Бүләков аҙансы, 1811 йылғы.

4-се башҡорт кантонына ингән Төпәй ауылы кешеләренең исемлегендә вазифалы булған кешеләр:

1. Йорт старшинаһы (йорт — ауыл мәғәнәһендә) Кинйә Амангилдин, 53 йәш;
2. Уның ағаһы Төпәй Амангилдин — отставкалағы старшинаның ярҙамсыһы, 66 йәш;
3. Төпәйҙең улы Төхвәтулла — старшина ярҙамсыһы;
4. Төпәйҙең улы Ғабидулла — 40-сы походтағы сотник.

Йорт есаулдары:

5. Итъеймәҫ Кетлимберов, 27 йәш;
6. Йыһанша Әхмәтов, 45 йәш;
7. Походтағы старшина — Бутусов, 41 йәш;
8. Хорунжий Әбделхәйер Әбтүсов, 29 йәш;
9. Аҙансы — Солтанкирәй Бутусов, 40 йәш.

1811 йылда төҙөлгән ауылдар исемлегендә Әбделкәрим тигән ауыл бар.

Был ауылдың старшинаһы итеп Ишмөхәмәт Пушапов, ярҙамсылары итеп Ғабайҙулла Абдрахимов, Мөхәмәтшәриф Буранғолов билдәләнгән.





09-2001.p65 164 29.08.01, 12:50
Black